8 класс
12.10.23

Биремле диктанттар

I. ӘСӘЙЕМ ЮЛҒА СЫҒА.

Һуғыш ваҡыты. Атайым фронтта фашистарҙы туҡмаҡ йөрөй, әсәйем колхозда эшләй ине. Бер саҡ әсәйем, Яҡуп ағайҙың артлы санаһын егеп, Тимертауҙағы өлгәйемде ҡунаҡҡа алып килде. Өлгәй берике кис ҡунғайны инде, әсәйем ҡайҙалыр китергә йыйына башланы.

Әсәйем өндәшмәй. Бер аҙҙан һуң ул сөйҙәге тунын алып кейә, аҡ ҡалын шәлен бәйләй, ә өлгәй уға тоғоноң биштәрен кейергә булыша. Шунан беҙ өсөбөҙ ҙә ултырғыстарға ултырабыҙ: юлға сығырҙан алда шулай итәләр бит. Шунан әсәйем ҡапыл урынынан тора, башта өлгәйҙе, унан һуң мине ҡосаҡлап ала. Тышта ҡыш, үҙе төн, ә ул алыҫ юлға сыға. Әсәйем, тиҙ-тиҙ генә атлап, ишеккә бара. Ул тағы беҙгә боролоп ҡарай ҙа: «Хушығыҙ!» — тип өй ишеген аса. Бына ул ҡураға сыҡты, ә мин уның аяҡ тауыштарын ишетәм. Әсәйем ҡапҡаны асып япты — инде урамда ҡар шығырлай. Тауышы алыҫая һәм аҡрыная бара: шығыр... шығыр... шығыр...

Мин, йүгереп килеп, өлгәйгә һыйынам, ул минең башымдан һыйпай.

— Һинең һеңлең булһа, яратыр инеңме? — тип һорай ул.

— Би-и-ик яратыр инем! *(М. Кәрим.)*

Эш. Теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙе табырға, уларҙың составын билдәләп, анализ яһарға.

 Диктанттар йыйынтығы